# ЦЕНТРАЛЬНАЯ МЕЖПОСЕЛЕНЧЕСКАЯ БИБЛИОТЕКА Г.БИРСК ПРЕДСТАВЛЯЕТ

# НОВИНКИ КРАЕВЕДЧЕСКОЙ ЛИТЕРАТУРЫ

ВЫПУСК №3



Башҡорт теленең академик һүҙлеге – башҡорт лексикографияһы тарихында беренсе аңлатма-тәржемәүи һүҙлек. Һүҙлек, нигеҙҙә, хәҙерге башҡорт теленең дөйөм ҡулланылышлы лексикаһын, фразеологияһын үҙ эсенә ала. Бынан тыш, һүҙлеккә киң таралған диалектизмдар, иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр, фәнни һәм халыҡ терминологияһы индерелгән. Һүҙҙәрҙең мәғәнәләре башҡортса аңлатыла, рус теленә тәржемә ителә һәм бай иллюстратив материал менән раҫлана. Баш һүҙҙәр рус, инглиз, төрөк телдәренә ауҙарыла. Һүҙлек телсе-ғалимдарға, журналистарға һәм нәшриәт хеҙмәткәрҙәренә, уҡытыусыларға һәм студенттарға тәҡдим ителә.

**Башkорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т.IX (У-Щ хәрефтәре)/Ф.Г.Хисамитдинова редакцияһында.- Өфө: Китап, 2017. – 980 б.**



**Зәйнәб Биишева. Мәкәләләр, ижади портреттар, иҫтәлектәр, kәләмдәштәренең һәм яkындарының хәтирәләре/ [төҙ.К.Ә.Аралбаев]. – Өфө: Китап, 2017. – 272 бит.**




Халkыбыҙ яратып уkыған оло быуын әҙибәнең – Зәйнәб Абдулла kыҙы Биишеваның (1908 – 1996) хәтирәләре, йәшлек эҙҙәре буйлап үткәндән тыуған сәйәхәт яҙмалары, ижады хаҡында замандаштарының уй-фекерҙәре, шиғри арнауҙары, милли әҙәбиәткә, мәҙәниәткә, сәнғәткә ҡағылышлы мәкәләләре, очерктары һәм өлкән улы Тельман Ғәзиз улы Әминевтың йылы иҫтәлектәре индерелгән.

**Хабир Галимов. Великий народный певец = Хәбир Ғәлимов. Бөйөк халыҡ йырсыһы. Книга-альбом/ авт.-сост.З.Х.Валиева. – Уфа: Китап, 2017. – 208 с.**

*В книге-альбоме представлены воспоминания друзей, коллег и почитателей таланта выдающегося башкирского оперного и эстрадного певца XX века Х.Л.Галимова. В издании собраны материалы о его жизни и творчестве ранее публиковавшиеся в газетах и журналах, а также новые – написанные специально для этой книги. Книга-альбом снабжена обширным иллюстративным рядом из домашнего архива певца, большая часть которого публикуется впервые.*



**Ғайсарова-Ғиззәтуллина, Г.М. Һөйөүем доғаһы повесть, хикәйәләр/ Гөлсирә Ғайсарова - Ғиззәтуллина. – Өфө: Китап, 2017. – 284 бит.**




«Мөхәббәт – ул тормош, тормош – ул мөхәббәт», ти француз мәҡәле. Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллинаның был китабына тупланған әҫәрҙәр тормоштан алынған миҫалдар менән был хәҡиҡәтте тағы ла бер тапҡыр раҫлай. Һөйөү беҙгә төрлө ҡиәфәттә килә, тик уны күрергә һәм аңларға һәләтебеҙ бармы? Ә бит әҙәм балаһының бәхете туранан-тура шуға бәйләнгән. Беҙ иһә байлыҡ тип сабабыҙ, дан көҫәп күҙебеҙ тона, шул арала ваҡ-төйәк ығы-зығылар арҡаһында йолҡҡоланып юҡҡа сыға барған мөхәббәт ғазап эсендә тонсоға. Нескә юмор, нәфис тойғолар, авторҙың бөтмәҫ-төкәнмәҫ һөйөүе менән һуғарылған образдар – был китап үҙенең иғтибарлы уҡыусыһына ысын мәғәнәһендә бәхетле мәлдәр бүләк итергә һәләтле.

Ғәлиәскәрова, Ғ.М. «Осорғосло бәпембәләр»: шиғырҙар, йомаҡтар, әкиәттәр / Ғәлиә Ғәлиәскәрова. – Өфө: Китап, 2017. – 92 бит




Ғәлиә Ғәлиәскәрованың «Осорғосло бәпембәләр» китабында шиғырҙар, йомаҡтар һәм әкиәттәр тупланған. Был китапта авторҙың кескәйҙәр өсөн тыуған яҡ, тәбиғәт күренештәре, үҫемлектәр, хайуандар донъяһы, алфавит хәрефтәре, һандар тураһындағы төрлө шиғырҙары, йомаҡтары, ҡыҙыҡлы әкиәттәре тәҡдим ителә. Йыйынтыҡҡа ингән шиғырҙар бәләкәстәргә башҡорт телендә һанарға өйрәнергә, хәреф танырға, ай исемдәрен белергә ярҙамға килә. Сағыу һүрәттәр менән биҙәлгән, сифатлы аҡ ҡағыҙға баҫылған китап бәләкәстәр өсөн файҙалы һәм матур бүләк булыр, башланғыс класс уҡытыусыларының, балалар баҡсаһында эшләгән тәрбиәселәрҙең һәм ата – әсәләрҙең күңеленә хуш килер, тип ышанабыҙ.

**Зәкиев, А.М. Күбәләк канатлы бал корты: повестьлар, хикәяләр/Айдар Зәкиев. — Уфа: Китап, 2017. – 176 бит.**

Китапта авторның повестьлары, хикәяләре урын алган. Алар укучы игътибарын үзенчәлекле теле, вакыйгаларның көтелмәгәнчә борылыш алуы белән җәлеп итә. Әсәрләр үзәгендә мәхәббәте, бәхете өчен көрәшүче сынмас рухлы геройлар язмышы тора.






**Ибраһимов, Ғ.Ғ. Кинйә: тарихи роман. Икенсе китап. Ил ағаһы/ Ғәли Ибраһимов. – Өфө: Китап, 2017. – 616 бит.**




Был әҫәр – «Кинйә» романының икенсе китабы. Ул Башҡортостан ерендә йәшәгән халыҡтарҙың Рәсәйҙәге феодаль ҡоролошҡа, дворяндар иҙеүенә ҡаршы социаль һәм милли азатлыҡ көрәшен сағылдыра.

Батша хөкүмәте башҡорттарҙы ла, башҡа халыҡтар кеүек үк, үҙенә буйһондороп тоторға тырыша һәм ҡаты язаларға дусар итә. Ләкин халыҡ ялпыһы сыҙап тора алмай, ҡаршы сыға. Был көрәштең башына Кинйә Арыҫланов, Юлай Аҙналин кеүек арҙаҡлы ил ағалары баҫа, яугирҙар алдында Салауат Юлаев пәйҙә була. Көньяҡ Уралды Емельян Пугачев етәкселегендәге крәҫтиәндәр һуғышы ялмап ала.

Автор был китабында ошо тарихи ваҡиғалар хаҡында бәйән итә.

**Кәримов, М.С. (Мостай Кәрим) Оҙон – оҙон бала саk= Долгое-долгое детство: повесть: башkорт hәм рус телдәрендә/Мостай Кәрим; [И.М. Кәримовтың рус теленә тәржемәhе]. – Өфө: Китап, 2017. – 432 бит.**




Йыйынтыҡта Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ике телдә «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы урын алған. Китап мәктәп уҡыусыларына, уҡытыусыларына, әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәҡдим ителә.

Начало всех начал – отчий дом, где мать пела первую песню. Здесь когда – то ты впервые коснулся земли, встал и, сделав первый шаг, ступил на порог. Дальше тропинка от родного дома ведет к односельчанам, за околицу, в большой и сложный мир… Так поэт шел в большую жизнь. О том, какая земля, какие люди сделали его поэтом, рассказывает Мустай Карим в своей автобиографической повести.

**Кәрим Мостай. Әçәрҙәр.VIII том: сығыштар, телмәрҙәр, әңгәмәләр / Мостай Кәрим.- Өфө: Китап, 2017. – 472 бит.**




Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим «Әçәрҙәр»енең VIII томына авторҙың төрлө йылдарҙа башҡорт-татар матбуғаты баçмаларында донъя күргән һәм уның шәхси архивында ҡульъяҙма көйө һаҡланған сығыштары, телмәрҙәре, әңгәмәләре индерелгән.



**Муллагалиева,З.М. Ак яулыклы тау: әкиятләр, хикәятләр, риваятьләр/Земфира Муллагалиева. – Уфа: Китап, 2017. – 176 бит.**




Земфира Муллағәлиеваның татар телендә донъя күргән «Аҡ яулыҡлы тау» китабына төрлө жанрҙағы әҫәрҙәре индерелгән. Автор Дим буйы тәбиғәтенең матурлығын, ундағы йәнлек һәм ҡоштар, үҫемлектәр донъяһындағы мажаралы хәлдәрҙе, баласаҡ хәтирәләре менән бергә үреп, үҙенең бәләкәй геройы исеменән һөйләй. Мөғжизәле һәм серле әкиәттәр уҡыусыға, һис шикһеҙ, оҡшар, иң яҡын дуҫына, серҙәшенә, әйләнер.

**Нәжми Назар. Һайланма әҫәрҙәр.III том: мәҡәләләр, әңгәмәләр, иҫтәлектәр/Назар Нәжми. – Өфө: Китап, 2017. – 472 бит.**




Был баҫмала Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең әҙәбиәт һәм мәҙәниәт доньяһы, талантлы шәхестәр хаҡында уйланыуҙары, замандаштарына һәм ватандаштарына бәйләнешле публицистик һәм әҙәби мәҡәләләре, иҫтәлектәре тупланған.



**Сальманов, Р.В. Музыка – жизнь моя: повесть, статьи, воспоминания/ Сост.С.Р.Сальманов, А.Р.Сальманова; [перевод с башк.Г.Н.Ягафаровой; авт.вступ.ст.Л.К.Сальманова]. – Уфа: Китап, 2017. – 172 с.**




В книге представлены литературные сочинения композитора Р.В. Сальманова, сохранившиеся в его личном архиве, также статьи, посвященные вопросам музыкального воспитания детей и юношества, изданные в республиканских газетах и журналах в 1970-х – начале 2000-х гг. В автобиографической повести «Звуки гармони» Рафика Сальманова рассказывается о ступенях становления и роста простого сельского парня, своим талантом, усердием и целеустремленностью завоевавшего повсеместную славу. Незабываемые детские и отроческие впечатления, первое знакомство с волшебным миром музыки, собственные шаги в этом мире…. Все это оставило неизгладимый след в душе тонкой созидательной натуры и вылилось в живое повествование о судьбе музыканта из глубинки.

Сборник адресован музыкантам и всем, кто интересуется духовной культурой башкирского народа.




**Әклимә Сафина «Күрше хаҡы»: повестар,** ***хикәйәләр, нәҫер*****/ Әклимә Сафина . -** ***Өфө: Китап, 2017. – 144 бит.***

Әклимә Сафинаның «Күрше хаҡы» йыйынтығына ингән повесть һәм хикәйәләрендә ҡатмарлы кеше яҙмыштары, төрлө хәл-ваҡиғалар, күңел кисерештәре тураһында һүҙ бара.



**Зөлфиә Сәлихова Атай абруйы: хикәйәләр, новеллалар, хәтирәләр, балалар өсөн әҫәрҙәр / Зөлфиә Сәлихова. – Өфө: Китап, 2017. – 136 бит.**




Хикәйәләрендә авторҙы ата менән ул, әсә менән ҡыҙ, кейәү менән киләш араһындағы мөнәсәбәттәр ҡыҙыҡһындыра, заман башҡа заң башҡа тигәндәй, хәҙерге көн проблемалары, йәштәрҙең, йәғни кейәү менән киләштең үҙ-ара ғаилә ҡороуы, ғаилә ҡорғас йәшәп китеүҙәре уйландыра, хәтирәләрендә иһә атаһы, Бибикамал өләсәһе, Бөйөк Ватан һуғышының башынан алып аҙағынаса ҡатнашҡан яугир-фронтовик Ғизитдин олатаһы тураһында һоҡланып яҙа, новеллаларында күберәк мөхәббәт, йәшәйеш, яҡшылыҡ менән яманлыҡ, изгелек менән яуызлыҡ кеүек мәңгелек темалар тупланған. Йәш яҙыусы һәр әҫәренең үҙәгенә тиерлек «атай» образын индерә, уға мәҙхиә йырлай, шуға күрә китабының исемен дә «Атай абруйы» тип атай.




**Фазлетдинов, К.Н. Ел осорған ауыл: сатирик һәм юмористик әҫәрҙәр/Камил Фазлый. — Өфө:Китап, 2017. – 140 бит.**

Үҙе уҡытыусы булараҡ, автор мәғәриф системаһында осраған ҡайһы бер етешһеҙ яҡтарҙы үткер сатира утында өтө, бер үк ваҡытта айырым шәхестәрҙең йомшаҡ сифаттарын үҙенсәлекле шаян юмор менән һүрәтләй. Тормош тәртәһенә һыймаҫтай күренештәрҙе эләктереп, “бүрттереп” тасуилай ҙа, бай һурәтләү сараларын ҡулланып, уҡыусы күңелендә йылмайыу тыуҙыра.



**Һаҡмар Лилиә. Матур йәшәй белеү – батырлыҡ шиғырҙар, поэмалар / Лилиә Һаҡмар. – Өфө: Китап, 2017. – 200 бит.**




*Матур йәшәй белеү – батырлыҡ!*
*Матурлыҡты ҡайҙан алам, тимә,*
*Һутың булһа сәскә шытырлыҡ,*
*Йөрәгеңдә үҫтер нәфис гөлдәр –*
*Тормош бит ул – үҙе матурлыҡ!*

Шағирәнең яңы китабы оло быуын уҡыусыларына ғына түгел, ә мәктәп уҡыусыларына, уҡытыусыларға һәм тәрбиәселәргә лә тәғәйенләнгән. Шиғырҙарын мәктәп кисәләрендә, класс сәғәттәрендә һәм башҡа әҙәби саралар үткәргәндә ҡулланырға була.



**Шитова,С.Н., Данукалова, Г.А. Уфа историческая. Книга вторая: Деревянное зодчество/С.Н.Шитова, Г.А.Данукалова. – Уфа: Китап, 2017. – 336 с.**

Читателям предлагается альбом, посвященный деревянному зодчеству и искусству резьбы. Слабо разработанная в истории края тема – городские традиции резьбы по дереву – подробно освещается впервые. Общая статья раскрывает особенности бревенчатой архитектуры в Уфе в губернский период. Как и в первой книге, авторами представлен большой фактический материал – сотни сделанных в последнее десятилетие снимков; используются и архивные фотографии. Подборки иллюстраций сопровождаются небольшими заметками о заселении городской территории и особенностях домостроительства. Помещённые в приложении красочные таблицы, составленные с учетом стилевых особенностей резьбы по дереву, показывают богатство декоративного искусства, связанного с деревянным зодчеством.



**Шәрифуллина,Э.М. Мөхәббәтнең ете төҫө: повестар һәм хикәйәләр/ Эльмира Шәрифуллина [З.Ш.Карабаева тәржемәһе] – Өфө: Китап, 2017. – 280 бит.**




**Сәңгелдәк һәм ләхет, йәшәү һәм үлем… Ошо аралыкта һыйған хәтирәләр: Атай – әсәй кәҙере, Тыуған ер бөйөклөгө, йәйғорҙоң ете төҫөн һеңдергән Мөхәббәт ғазаптары – мәкерле лә, ләззәтле лә ғүмер биҙәгән Вакыт ғали йәнәптәре бизмәнендә бер миҙгелгә тиң. Әммә күҙ асып йомған арауыктағы был йәшәйешебеҙҙең бәрәкәте, киммәте нимәлә? Яҙыусы Эльмира Шәрифуллинаның психологик кисерештәр менән ижад ителгән проза әҫәрҙәре укыусыны шул хакта уйланырға сакыра.**






**Әхмәт-Хужа Әсхәл. Йөрәккә йөрәк тоташа: Әсхәл Әхмәт-Хужа шиғырҙарына башkорт композиторҙарының йырҙары һәм романстары /Әсхәл Әхмәт-Хужа – Өфө: Китап, 2017. – 200 бит.**

Шағир Әсхәл Әхмәт-Хужаның был китабына концерт залдарында, радиола, телевидениела йыш яңғыраған романстары һәм көндәлек тормошта – клуб сәхнәләрендә, мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында ололар ҙа, кеселәр ҙә яратып башҡарған йырҙары һәм романстары тупланған. Кесе һәм урта йәштәге мәктәп балалары өсөн.

